# Ҡағиҙәләр







Торомтаева Рәмилә Юлай ҡыҙы,
Сибай ҡалаһы «Ирәндек» лицейының
башланғыс кластар уҡытыусыһы.

**Баш хәреф**

- Кешенең исем-фамилиялары
- Ер-һыу атамалары
- Хайуан кушаматтары
- Әҙәби әҫәр, гәзит, журнал, китап исемдәре
- Телевидение, радио тапшырыуҙары



# Башҡорт теленең төп законы

*Башҡорт телендә һүҙҙәр*

*йә калын ижекле, йә нәҙек ижекле була.*

# Һуҙынҡы өндәр

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| калын өндәр | а | о | у | ы |  |
| нәҙек өндәр | ә | ө | ү | и | э |

# Башҡорт теленең төп законы.





**Башҡорт телендә һүҙҙәр йә ҡалын ижекле, йә нәҙек ижекле була. Ялғау ҙа шуға ярашлы ҡушыла: ағас-тар, көҙ-гө, миҙгел-дәр, ҡойола-лар.**

**Был башҡорт теленең төп законы.**

# Туғандаш һүҙҙәр, тамырҙаш һүҙҙәр.





Һүҙ яңғыҙ йәшәмәй. Уның яҡын туғандары була. Ундай һүҙҙәр – туғандаш йәки тамырҙаш һүҙҙәр. Тамыры ҡалын булһа, ҡалын ялғау, нәҙек булһа, нәҙек ялғау ҡушыла.

# Парлы тартынҡылар



| | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Яңғырау тартынҡылар | б | в | г | ғ | ж | д | з | ҙ |
| Һаңғырау тартынҡылар | п | ф | к | ҡ | ш | т | с | ç |

# Башҡорт телендә 14 яңғырау, 10 һаңғырау тартынҡы бар.



| | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Яңғырау тартынҡылар | й | р | л | м | н | ң | | |
| Һаңғырау тартынҡылар | | | | | | | х | һ |

# [к]-[г], [ҡ]-[ғ], [п]-[б] өндәренең сиратлашыуы



[к], [ҡ], [п] өндәренә бөткән һүҙгә һуҙынҡы өнгә башланған ялғау ҡушылһа, ул өндәр [г], [ғ], [б] өндәре менән алмашына: еләк – еләге, ҡолаҡ – ҡолағы, мәктәп – мәктәбе. Тел ғилемендә һүҙҙәрҙә [к]-[г], [ҡ]-[ғ], [п]-[б] өндәренең сиратлашыуы күренеше тип атала.

# Сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәр

Сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәр ҡатнаш ижектәрҙән, йәғни нәҙек һәм ҡалын ижектәрҙән торорға мөмкин: си-рат, Би-лал, си-фат, та-лип һ.б.

Был ғәрәп, фарсы телдәренән ингән һүҙҙәр.



# Рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр

Үҙләштерелгән һүҙҙең һуңғы өнө ҡалын ишетелһә, ҡалын ялғау, нәҙек ишетелһә, нәҙек ялғау ҡушыла: **билет – билеттар, кухня – кухняға, июль – июлдә.**

**Ысмала, әсмүхә, мейес, ужым, арыш, гәзит, бирсәткә, тәпешкә** – рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр.



# Рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр

Нәҙеклек билдәһенә бөткән һүҙҙәргә ялғау ҡушҡанда, нәҙеклек билдәһе төшөп ҡала: токарь – токарҙы, тюлень – тюленде, портфель – портфелдәр. Ай исемдәренең күбеһе нәҙеклек билдәһенә бөтә һәм уларға нәҙек ялғау ҡушыла: апрель – апрелдә, декабрь – декабрҙең һ. б.

Календарь, токарь, слесарь, лагерь һүҙҙәрен иҫендә ҡалдыр. Уларға ҡалын ялғау ҡушыла.



# Сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәр



Ҡуш тартынҡыға бөткән сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәргә ялғау ҡушҡанда ҡуш тартынҡының береһе төшөп ҡала: **металл – металға, класс – класта**.

# Ике өндө белдереүсе хәрефтәр



Е, ю, я хәрефтәре ике өндө белдерә. Һүҙ башында [йэ],[йу],[йа] өндәре ишетелгән урында е, ю, я хәрефтәре яҙыла; ер, ел, юл, юна, яра, яға һ. б.

Һүҙ башында ла, һүҙ уртаһында ла, һүҙ аҙағында ла [йу],[йа] өндәре ишетелгән урында ю, я хәрефтәре яҙыла.

Һүҙ башында [йэ] өнө ишетелһә – е хәрефе яҙыла

# Һүҙъяһалыш



дуҫ
- дуҫтар
- дуҫһыҙ
- дуҫлыҡ
- дуҫтарса

еләк
- еләкле
- еләкһеҙ
- еләклек
- еләксе

## ялғауҙар

- үҙгәртеүсе
- яһаусы





Ялғауҙар

- Үҙгәртеүсе
  - Ялғау ҡушҡанда һүҙҙең мәғәнәһе үҙгәрмәһә
- Һүҙ яһаусы
  - Ялғау ҡушҡанда һүҙ икенсе бер төрлө мәғәнәгә эйә булһа

# Тамырында ла, ялғауында ла о!
# Тамырында ла, ялғауында ла ө!

Һүҙҙең тамырында о йәки ө хәрефе булһа, уны нимәне? нимәнең? һорауына ярашлы үҙгәрткәндә һүҙҙең ялғауында ла о йәки ө хәрефе яҙыла.



# Ҡуш тартынҡылы һүҙҙәр



ҙ,т хәрефенә бөткән предметтың атамаһын белдергән һүҙгә -ҙәр, -ҙар, -ҙа, -ҙә, -ҙө, -ҙо йәки -тәр, тар, -тә, -та, -тө, -то һәм башҡа ялғауҙар ҡушҡанда һүҙҙә ҡуш тартынҡы барлыҡҡа килә: күҙҙәр, кәрәҙҙәр, һаҙҙа, көҙҙө, ҡанаттар, минуттар, һ.б.

# Куш тартынҡылы һүҙҙәр

ат – та
ат – ты
ат – тар
баҙ – ҙы
баҙ – ҙа
баҙ – ҙар




эт –те
эт – тә
эт – тәр
кәрәҙ- ҙе
кәрәҙ – ҙә
кәрәҙ - ҙәр

# Ҡушма һүҙҙәр

Ике һүҙ ҡушып яһалып, бер предметтың атамаһын, хәрәкәтен, билдәһен белдерһә, бындай һүҙҙәр ҡушма һүҙҙәр тип атала: көнбағыш, ҡыҙылғанат, Ямантау, ҡарай-ҡарай, яман-яман һ.б



# Ҡушма һүҙҙәр

- Ҡушып яҙыла
- Һыҙыҡса аша яҙыла
- ь,ъ айырыу билдәләре яҙыла




ҡушма һүҙҙәр
ҡушып яҙыла
ь,ъ билдәләре ҡасан яҙыла?
һыҙыҡса аша яҙыла
нәҙек тамыр
+ ь +
я йәки ю хәрефтәренә башланған тамыр
ҡалын тамыр
+ ъ +
я йәки ю хәрефтәренә башланған тамыр
ҡабатлау йәки ишләү юлы менән яһалғанда

# Һылтанмалар:

- Ф.Ш.Сынбулатова, Г.Ә. Вәлиева
«Башҡорт теле» 3 класс өсөн дәреслек
1,2 –се киҫәктәр,
З.Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте,
Өфө- 2012

